

Аяҙғол мәктәбе гәзите

# Мәктәп тормошо



Март, 2019. Айына бер сыға

## Яңылыктар

Дәрбеш урта мәктәбендә өлкә кимәлендә “Әсәм теле- сәсән теле”шиғыр һөйләүселәр конкурсы булып үтте.Беҙҙең мәктәптән ике укыусы катнашты.Район конкурсында призлы урын яулаусылар- Ҡотлохужина Илүзә һәм Янбаева Ләйсән. Финалға сығыусылар дипломдары менән бүләкләнделәр. Кыҙғаныс, призлы урындар яулай алманык. Танауҙарҙы төшөрмәйбеҙ, киләһе йылда тырышасаҡбыҙ.

## Аҙна ваҡиғалары

Ҡатын- кыҙҙар байрамы етеп килә. Мәктәп гөрләп тора. Һәр бер синыф әсәләренә ниндәй ҙә булһа сара үткәрергә әҙерләнә.





Был бүләктәрҙе башланғыс мәктәп укыусылары эшләгән.

## Ҡотлайбыҙ



Яҙҙың тәүге көнөндә башланғыс синыф укытыусыһы Гөлсиә Кәтип кыҙының тыуған көнө. Беҙ, укыусылар, һеҙҙе ошо ғүмер байрамығыҙ менән котлайбыҙ. Һеҙгә һаулык, бәхет, оҙон ғүмер, сабырлык, тырыш укыусылар теләп калабыҙ.

## Әсәкәйем- кояшым (иншаларҙан өҙөктәр)

Әсәкәйем! Минең өсөн иң кәҙерле һәм якын кеше ул! Был һүҙҙән әйтеп бөтә алмаҫлык наҙ һәм нур бөркөлгәндәй! Һәр бала теле асылыу менән ошо һүҙҙе әйтә.

Минең әсәйем бар тәбиғәт кышкы йоконан уянған мәлдә донъяға килә. Ата- әсәһе әсәйемә яратып бик матур исем һайлайҙар- Зөлфиә… (Истамғолова Сулпан).

Әсәйем Флүзә Айрат кыҙы Ҡотлохужина күп балалы ғаиләлә тыуып үҫкән.

Бәләкәйҙән кул эшенә оҫта. Мәктәптә укыған сағында ук ябай ептән селтәр яғалар, салфеткалар сигергә өйрәнгән, бейәләй, ойокбаш бәйләгән. Әсәйем әле лә беҙгә барыһын да бәйләп кейҙерә.

Әсәйем кешенән артта калырға яратмай: ул барыһына ла өлгөрөргә тырыша, беҙҙе лә эшкә өйрәтә… (Ҡотлохужина Илсиә).




## Конкурс

3 апрелдә Арғаяш Мәҙәниәт һарайында “Һаумы, һаумы, әкиәт!” район конкурсы үтәсәк. Ҡатнашыусылар- 5-7 синыф укыусылары. Әҙерлек эштәре бара. Ҡатнашыусыларҙың барыһына ла уңыштар теләп калабыҙ.

## Көлөп алайык!



Алты йәшлек кыҙ:

-Әсәй, һин бөгөн бигерәк матурһың!

-Рәхмәт, кыҙым!

Ун алты йәшлек кыҙ:

-Әсәй, һин бөгөн бигерәк матур!

-Күпме акса кәрәк тиһең, кыҙым?

Ике кыҙ буфетта ашап ултыра. Береһе:

-Сәйҙәре шул тиклем тәмһеҙ!

Икенсеһе:

-Алйот, был бит- кофе!

Буфетсы:

-Шунан, кыҙҙар, какао окшанымы?

Редакторҙар; Ситдикова Вилиә,

Хисамитдинова Сабина,

Янбаева Ләйсән.